*Радик ХӘКИМЙӘН*



# ”Йәйҙең шундай матур, йәмле сағы...”

## *Тыу ан ерем*

Тыуған ерем — урман-тауҙар яғы,
Баҫыу-болондар ҙа етерлек.
Ҡаяларҙа мәғрур ҡарағайҙар
Зәңгәр күкте тора күтәреп.

Тыуған ерем — шишмә-йылға яғы,
Ялан сәскәләре ни саҡлы,
Салауаттың эҙе ҡалған бында,
Ҡайындары менән ул яҡты!

Тәбиғәт гел ҡырыҫ булһа ла бит,
Яҡташтарым тырыш, түҙемле.
Тамырҙарым шунда, еркәйемә
Гел бурыслы тоям үҙемде.

Тыуған ерем — ғәзиз Ҡыйғым менең,
Алтын башаҡ, моң һәм йыр иле.
Яҡташтарым ергә береккәндәр
Беҙәр, нурлар өсөн гел һине!

## *Хәтерҙәрҙә башаҡ төҫө булып ҡалдың*

*Яҡташым, колхозыбыҙҙың данлыҡлы бригадиры*
*Сәмиғулла Хиләжевтың яҡты рухына бағышлайым*

Ҡара яҙҙан ҡарлы көҙгә тиклем
Иңләне ул баҫыу-ҡырҙарҙы.
Тыуған еркәйенә бүләк итте
Йөрәк утын, күңел нурҙарын.

Алдан уҡ гел хәстәрлеген күрҙе,
Ҡайҙа, ҡасан, нимә сәсергә?
Мул уңыштар алыу серҙәрен бит
Өйрәтте ул һәр саҡ йәштәргә.

Иртә таңдан ҡара төнгә ҡәҙәр
Күпме баҫыу, ҡырҙы үтте ул.
Ужымдарҙы наҙлап доға ҡылды
Алтын башаҡтарҙы үпте ул.

Бесән булһын, иген булһын, тиеп
Янды һәр саҡ ярһыу йөрәге.
Төштәрендә хатта күргәндер ул
Сонҡа ҡырын, Оҙон түбәне.

Көн боҙолһа, йәне әрней ине,
Һыҙлай ине йөрәк яраһы.
Ил яҙмышын уйлап йәшәне ул,
Еркәйемдең ғәзиз балаһы.

Тыуған яҡта изге эштәрең бар,
Ер хужаһы булдың ғүмергә.
Һинең төҫөң башаҡ төҫө булып
Мәңгелеккә ҡалды күңелдә.



## *Йәйге ту айҙа*

Йәйҙең шундай матур, йәмле сағы,
Хуш еҫ бөркә туғай-үләндәр.
Ал таңдарҙа салғы моңон тыңлап,
Низәр уйлай икән үләндәр?

Зәңгәр күктә өйкөм-өйкөм булып
Аҡ болоттар ағып үтәләр.
Ә кешеләр сикһеҙ күккә ҡарап,
Бары яҡшы хәбәр көтәләр.

Шомландырып ҡапыл күңелдәрҙе,
Шаулап ҡуйҙы ҡайын-имәндәр.
Әллә елдән, әллә балта һиҙеп,
Башҡайҙарын түбән эйгәндәр!

...Йәйҙең шундай матур, йәмле сағы,
Хуш еҫ бөркә туғай-үләндәр.
Кешеләргә, зәңгәр күккә ҡарап,
Низәр уйлай ағас, үләндәр?!

## *Уралтауҙа уйланыуҙар*

Европа, Азия ҡауышҡан
Уралтау итәгендә.
Миңә лә тура килде бит
Шул яҡта "сейләнергә".

Уралдың йәне, йөрәге —
Златоуст һәм Силәбе,
Бында күпме тимер, баҡыр,
"Бешә ҡурай еләге".

Күпме сер, тылсым һаҡлана
Мөғжизәле был илдә.
Оса торған тәрилкәләр
Төшәләр, имеш... ергә!

Беренсе булып донъяла
Бында булат ҡойолған.
Тау-таштарҙы ватып-ярып,
Себер юлы һалынған.

"Маяҡ"тың зәһәр уттары
Шул яҡтарға таралған!
Был фажиғә, ғәрәсәттән
Бар тәбиғәт ҡырылған.

Арғаяш, Ҡоншаҡ һыуҙары
Бер моңая, бер тына.
Әллә низәр уйлаталар,
Кемдәрҙе һуң юҡһына?

Ил тарихы, үткәндәр ул
"Таш ҡапсыҡ"ҡа бикләнгән.
Әле һаман байтаҡ серҙәр
Асыҡланып бөтмәгән.

"Таш билбау"ға ерен урап,
Торалар тауҙар баҫып,
Елдәр генә иҫһен инде
Яҡшы хәбәрҙәр ташып!

## *Ша ирҙар*

Шағирҙар изге күңелле,
Йәшәйҙәр ярһып-янып,
Ел-дауылға күкрәк ҡуйып,
Буранға ҡаршы барып.

Шағирҙар ғашиҡ донъяға,
Сафлыҡ, намыҫ һаҡлаусы,
Матурлыҡтар бүләк итеп,
Көсһөҙҙәрҙе яҡлаусы!

Шағирҙар һиҙгер, иманлы,
Һәр нәмәлә эше бар,
Башҡаларҙың ҡайғыларын,
Үҙ итеүсе кешеләр!

Хаҡлыҡ-паклыҡ, тиеп яна,
Борсолоп, әрнеп-көйөп,
Ут-ялҡындарға ташлана,
Еркәйен шашып һөйөп.

Шағирҙарҙың йәне — һаҡта,
Иртәһен-кистәрен дә.
Ғазаптарҙа тыуа йырҙар,
Ял, йоҡо иҫәбенә.

Шағирҙарҙың уй-хистәре,
”Ҡош юлдары”нан бейек.
Шуға улар бер ҡасан да
Йәшәмәй башын эйеп!

Шағирҙарҙың йөрәгенә
Бар донъя, йыһан һыйған,
Өмөтһөҙгә илһам биреп,
Йылыта ҡояш һымаҡ.

Шағирҙар ғорур булалар,
Ваҡлыҡтарҙан юғары,
Донъя малы — байлыҡмы ни,
Рух һау булһын, ни бары!

Шағирҙар илде ҡайғырта,
Йондоҙҙарға күҙ һалып,
Киләсәккә юлдар яра,
Янында — ябай халыҡ.

...Аҡыллылар күп ул ерҙә,
Изгеләр һирәгерәк,
Донъяны нурлап йәшәргә
Шағирҙар күберәк кәрәк!!!



## *Тәҙрәмә кошсоҡ кун ан*

Килер микән әллә туғандарым,
Таныштарым, яҡын дуҫтарым,
Һөйөнсөгә емдәр һибәм әле,
Китмәй торогоҙсо, ҡоштарым.

Килер микән берҙән-берем минең,
Күптән инде һағынып көтәмен,
Уның һынын, нурлы ҡараштарын
Йөрәк түрҙәрендә йөрөтәмен.

Тәҙрәгә берәй ҡошсоҡ ҡунһа,
Юрағандар ҡунаҡ килеүгә.
Ана, бер ҡош тәҙрәмде сиртә —
Насип булыр кемде күрергә?!

...Рәхмәт инде һиңә, изге ҡошсоҡ,
Бәхет-шатлыҡтарға күмгәнгә.
Йүгереп сығып ҡаршы алайымсы —
Тап булырмын икән кемдәргә?!